ВОСХОД
**№42** (10089)
Пятница
**27 октября 2023 года**
АРГАЯШ **МЕДИА**
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №10 (151)
ОКТЯБРЬ, 2023 ЙЫЛ

ВАҠИҒА

# ҠОРҒА ЙЫЙҘЫ БЕҘҘЕ СИЛӘБЕ

## РӘШИТ ХӘКИМОВТЫҢ «ЯПОН МУЛЛА» РОМАНЫНЫҢ ИСЕМ ТУЙЫ ҮТТЕ



Сараға Магнитогорск ҡалаһының «Аҡ ҡауырһын» әҙәби берекмәһе етәксеһе Сафина Хәкимова килде.
**Марат АБДУЛВӘЛИЕВ фотоһы.**

**Редакциябыҙ журналистарының Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре башҡорт теле уҡытыусыларының август кәңәшмәһендә ҡатнашып ҡайтыуы хаҡында хәбәр иткәйнек инде. Унда Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, тарихсы һәм журналист Рәшит Хәкимовтың «Япон мулла» романы буйынса конференция ла уҙғарылды.**

**Зөлфиә ХАННАНОВА,**
*«Ватандаш»*

### «БЫЛ ТУРАЛА ЯҘМАУ МӨМКИН ТҮГЕЛ ИНЕ!..»

***Рәшит Хәкимов, тарих фәндәре кандидаты, «Япон мулла» романының авторы:***

– Ҡәҙерле уҡытыусылар, яҡташтар! Хөрмәтле Башҡортостан ҡунаҡтары! Рәхмәт һеҙгә алыҫ юлды яҡын итеп беҙгә, Силәбегә, килгәнегеҙгә. Ошондай һәр осрашыу беҙгә илһам, яңы көс бирә. Шөкөр, беҙ оло Башҡортостан менән бергә йәшәйбеҙ, туған республикабыҙ беҙҙе онотмай, ситтә ҡалдырмай. Башҡортостан йәшәһә, беҙ ҙә юғалмаҫбыҙ.

Үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ, хәҙер айфондар, социаль селтәрҙәр заманы. Улар балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла үҙенә арбаған. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, беҙҙең урындағы уҡытыусыларыбыҙ, әҙәбиәт һөйөүселәр, ҡоролтай активистары балаларыбыҙҙы әсә теленән айырмаҫҡа тырыша.

Был юҫыҡта Ҡамса Мортазин етәкләгән Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә лә күп көс һала.

«Япон мулла» романына килгәндә, уны ижад итер алдынан миңә Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев тураһында бер нисә фәнни мәҡәлә баҫтырырға тура килгәйне. Легендар шәхестең бер үк ваҡытта шул тиклем аяныслы һәм шул тиклем сағыу яҙмышы ҡулыма ҡабат ҡәләм алырға мәжбүр итте. Икенсенән, яҡындан белмәһәм дә, хәҙрәтте өләсәйем үткәргән аят мәжлесендә тап иткәнем бар ине. Дин әһеле мине үҙенең иҫ киткес энергетикаһы менән хайран ҡалдырғайны.

Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев – үҙебеҙҙең Арғаяш башҡорто. Уны күреп белгән кешеләр әле тере саҡта уларҙың иҫтәлектәрен дә тарих биттәренә теркәгә килде.

Токио ҡалаһында беренсе мәсет төҙөткән Ҡорбанғәлиевтең тормош юлы – ул үҙе бер ҡаһарманлыҡ. Ул үҙенең халҡына һәм ислам диненә тоғро хеҙмәт иткән. Ғүмер юлының драматик ваҡиғаларға шул тиклем бай булыуы яҙыусы фантазияһынан да ашып китә. Әлбиттә, яҙмышында беҙгә билгеһеҙ мәлдәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, Владимир ҡалаһындағы төрмәлә булған осоро. Бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итеүемә ҡарамаҫтан, махсус хеҙмәттәр архивы бер ниндәй мәғлүмәт менән дә бүлешмәне.

Төп геройымдың рухи ныҡлығы иҫте китерә. Нимә генә кисермәй ул: еңелеү, яҡындарын юғалтыу, йәшәгән иленән ҡыуылыу, махсус төрмәгә бикләнеү, сит илгә сығырға тыйылыу сәбәпле, ғүмеренең аҙағынаса Японияла тороп ҡалған һөйөклө ҡатыны, ғәзиз балалары менән күрешә алмау... Күптәр уны аңламай. Күптәр, хатта ҡайһы бер туғандары ла, эҙәрлекләүҙәрҙән ҡурҡып, унның менән аралашыуҙан баш тарта...

Роман өҫтөндәге эш тамамланһа ла, әле булһа Япон мулла яҙмышына ҡағылышлы яңынан-яңы факттар асылып тора. Әхмәтзәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан, Ғәлимйән Таған кеүек большевиктар тарафынан эмиграцияға китергә мәжбүр ителгән башҡорт милли интеллигенцияһының аҫыл бер вәкиле Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев шәхесе буйынса фәнни эҙләнеүҙәр артабан да дауам ителергә тейеш. Ошо һанап үткән шәхестәр сит илдә лә ғәйәт ҙур уңыштарға өлгәшкән, киң танылыу яулаған. Тыуған Башҡортостанынан шундай мәшһүр ир-егеттәрҙе айырыуҙары әйтеп бөткөһөҙ үкенесле! Һуңынан, 1930 йылдарҙа, Совет власы, Сталин йөҙөндә, ҡалған милли элитаны ла ҡырып бөтөрә. Йәш республика өсөн был бик ауыр, кире ҡайтарғыһыҙ юғалтыу була.

Етмеш йыл дауамында Совет власы башҡорттарҙың хәтеренән аҫыл улдарының исемен юйырға маташты. Уларҙың хатта фамилияларын да иҫкә алыу тыйыла ине. Әле булһа хәтеремдә: өсөнсөмө, дүртенсеме класта уҡып йөрөгән сағым. Ауылдашым, туған тейешле Фәйзрахман Хәкимов ағай кем тураһындалыр иҫкә алғанда, бышылдап ҡына: «Ул бит элекке вәлидовсы!» – тип ҡуйғайны.

Халҡыбыҙҙың үҙ тарихын белеп еткермәүе, күп ваҡиғаларҙың йәшерелеп йәки үҙгәртелеп килеүе һәм «Кем беҙ? Ҡайҙан беҙ? Ҡайҙа китеп барабыҙ?» тигән һорауҙарға яуап эҙләү күп яҙыусыларҙы тарихи романдарға тотонорға сәбәпсе иткәндер ҙә инде.

### «РӘСӘЙҘЕҢ ТЕРЕ ШИШМӘЛӘРЕ...»

***П.И.Чайковский исемендәге Көньяҡ Урал дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы, Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе етәксеһе, филология фәндәре кандидаты Ҡамса Мортазин:***

– Көньяҡ Уралдың башҡорт һәм татар телендә ижад иткән яҙыусыларын берләштергән беҙҙең ойошма былтыр үҙенең 60 йыллығын билдәләне. Рәсәй Яҙыусылар союзының Силәбе бүлексәһе рәйесе, шағир Олег Павлов, берекмә эшмәкәрлегенә баһа биреп, уны Рәсәйҙең тере шишмәләре менән сағыштырҙы. Был хаҡ баһа. Силәбе башҡорттарының тормошонда уның роле бик ҙур.

Силәбе һәм Ҡурған өлкәһе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ассоциацияһына ла тәүге көндәрҙән үк ышанысылы партнерҙар булдыҡ. Берлектә үткәрелгән дөйөм саралар региондың рухи мәҙәниәте үҫешенә һәм ижади интеллигенцияның берләшеүенә бермә-бер өлөш индерә. Бөгөнгө конференция ла быға ҙур дәлил.

Арғаяш районында уҙғарылған «Кәтибә Кинйәбулатова уҡыуҙары», «Сәләм уҡыуҙары», Сосновка районында үткәрелгән асыҡ дәрестәр матур йолаға әүерелде. Этномәҙәни белем биреү маҡсатында Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы Сәфинә Хәкимова етәкселегендә Магнитогорск ҡалаһында – «Аҡмулла уҡыуҙары», «Мостай уҡыуҙары», «Хәй уҡыуҙары», «Атайсал», Силәбелә П.И.Чайковский исемендәге Көньяҡ Урал дәүләт сәнғәт институты базаһында «Рафиҡов уҡыуҙары» кеүек ижади проекттар тормошҡа ашырылды. Көньяҡ Урал документалистикаһы оҫтаһы, билдәле ғалим Рәшит Хәкимовтың фәнни хеҙмәттәрен һәм әҙәби әҫәрҙәрен өйрәнеү маҡсатында «Хәкимов уҡыуҙары»нда ойоштороп ебәрһәк, тағы бер матур башланғысҡа нигеҙ һалыныр ине.

Халыҡ рухы урғылған ерҙә көслө ижад үрнәктәре тыуа, тиҙәр. Көньяҡ Урал ижадсыларының әҙәби һәм мәҙәни тормошо был һүҙҙәргә кеүәт. 106 йәшлек ғүмер юлын уҙған шағир-фронтовик Әхмәт Рафиҡовтың «Калуганан Берлинға тиклем» тип исемләнгән автобиографик повесы – йәштәрҙе тәрбиәләү эшендә өҫтәл китабы булырҙай әҫәр.

Тыуған яҡты өйрәнеү буйынса фәнни эҙләнеүҙәр, әҙәби әҫәрҙәр, публицистик хеҙмәттәр менән Арғаяш районы вәкилдәре лә әленән-әле ҡыуандырып тора. Арғаяштарҙың «Таң нурҙары» әҙәбиәт берекмәһе киләһе йыл 30 йыллығын билдәләй. Улар араһында Зәйтүнә Хәйруллина менән Азат Кинйәбулатовтың тыуған яҡты өйрәнеү буйынса хеҙмәттәрен, мәғариф ветераны Сәймә Фазылованың «Бибисара» повесын, Гөлъямал Нәжмиеваның шиғыр йыйынтыҡтарын, Ҡәйүм Ҡушаевтың хәтирәләр китабын һәм, әлбиттә, Рәшит Хәкимовтың тарихи әҫәрҙәрен айырым билдәләп үтергә мөмкин. Билдәле публицист, йәмәғәт эшмәкәре, тарих фәндәре кандидаты Рәшит Хәкимов – 13 китап авторы.

### «ДАНЛЫ АТА-БАБАЛАРЫБЫҘҘЫ ГЕЛ ИҪТӘ ТОТАБЫҘ...»

***Альберт Шәрәфетдинов, Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Ҡуйһары ауылы мәсете имам-хатибы, Ҡорбанғәлиевтәр нәҫеленән:***

– Беҙҙең нәҫел элек-электән дин юлына әйҙәүсе, дин дәрестәрен уҡытыусы булған. Беҙҙең яҡтарҙа Ҡорбанғәлиевтәр тотҡан Миҙиәк мәҙрәсәһен белмәгән кеше юҡтыр. XX быуат башында был уҡыу йорто тураһында бөтә Рәсәй мосолмандары хәбәрҙар булған. Мәҙрәсәлә бер юлы 320 шәкерт белем алған. 1912 йылда нәшер ителгән «Ислам донъяһы» («Мир ислама») журналында былай тип яҙылған: «Миҙиәк мәҙрәсәһе – иң ҙур мәҙрәсәләрҙең береһе һәм ундағы уҡытыу процесы ныҡ юғары кимәлдә ҡуйылған». Күреүебеҙсә, атаһы Ғәбиҙулла ишан Ҡорбанғәлиев ойошторған мәҙрәсәлә һалынған ғилем орлоҡтары Мөхәммәт-Ғәбделхәйгә хатта Япония тарафтарында ла юғалып ҡалмай, кешеләрҙе дингә өндәргә ярҙам иткән.

Беҙҙең ата-бабабыҙ Арҡа батырҙың улы Йосоп Арыҡов 1770–1866 йылдарҙағы башҡорт восстаниеһы етәкселәренең береһе була. Был кеүәтле нәҫелдән өс шәйех үҫеп сыҡҡан: Ғәбделхәким Сарҙаҡлы заманында Зәйнулла Рәсүлевтең остазы булған. Ғәбделхәким ишандың улы Ғибәҙулла Ҡорбанғәлиев тә шәйех дәрәжәһенә күтәрелгән. «Япон мулла» романының төп геройы шәйех Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ғибәҙулла улы Ҡорбанғәлиев иһә – Ғәбделхәким Сарҙаҡлының ейәне була.

Беҙ данлы ата-бабаларыбыҙҙы гел иҫебеҙҙә тотабыҙ. Күренекле дин әһелдәре Ҡорбанғәлиевтәрҙең эшмәкәрлегенә арналған фәнни-ғәмәли конференциялар, йыйындар үткәреп торабыҙ. Был сараларҙа Силәбе тарихсылары менән бер рәттән Өфөнән килгән Айһылыу Юнысова, Салауат Хәмиҙуллин кеүек ғалимдар ҙа сығыш яһай.

Ҡорбанғәлиевтәр тураһында халыҡ араһында төрлө фекер йөрөй ине. Тарихсы ғалимдарҙың сығышы күп шикле һорауҙарға яуап табырға ярҙам итте. Шәхсән үҙем шуны аңланым: Ҡорбанғәлиевтәр үҙ һүҙен һүҙ итә торған кешеләр булған. Буш вәғәҙә бирмәгән.

ШӘХЕС

# БИЛДӘЛЕ БАШҠОРТ ПРОФЕССОРЫ

**Быйыл совет, башҡорт геологы-нефтсеһе, билдәле дәүләт эшмәкәре, яҡташыбыҙ Ҡадир Рәхим улы Тимерғазиндың тыуыуына 110 йыл тулды.**

**Михаил ХӘБИРОВ,**
*тыуған яҡты өйрәнеүсе*

Тап Ҡадир Рәхим улы башҡорт халҡы вәкилдәренән геология-минералогия фәндәре буйынса беренсе профессор һәм фән докторы булған тип иҫәпләнә. Ҡадир Тимерғазин — легендар совет геологы, Башҡортостанда яңы нефть ятҡылыҡтарын асыусы. Уның яҙмышы – үҙ-үҙенә, үҙ тәғәйенләнешенә, ғүмерен бағышларға ҡарар иткән эшкә тоғролоҡ өлгөһө.

Бала саҡтан уҡ Ҡадир Тимерғазин күп һанлы ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, маҡсатына табан бара. Уның кеүек кешеләр тураһында: «Үҙ-үҙен аяҡҡа баҫтырған Кеше» тиҙәр, сөнки уның янында ярҙам итер яҡын туғаны булмай. Киләсәк быуындар хәтерендә ул «башҡорт нефте ятҡылыҡтарын асҡан тәүге кеше» булараҡ ҡала.

Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин 1913 йылдың 5 февралендә Пермь губернаһы Шадринск өйәҙе Осиновска улусы Һабаҡтыкүл ауылында, хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Силәбе ауылында тыуған. Рәхим Тимерғазиндың бай булмаған ғаиләһендә ул һигеҙенсе һәм иң кесе бала иҫәпләнә. Туғыҙ йәшенән башҡорт байҙарының көтөүсеһе, һуңынан батрагы була. 14 йәшендә Арғаяш икенсе баҫҡыс мәктәп-интернатына уҡырға инә, уны тамамлағандан һуң 1930 йылда Ҡазан университетының геология факультетын тамамлай. Институт бөтөүгә уны аспирантураға саҡыралар, әммә Ҡадир Тимерғазин Башҡортостанға ҡайта.

1935 йылдан башнефтекамбинат Үҙәк ғилми-тикшеренеү лабораторияһының (ЦНИЛ) эксперименталь-промысла геологияһы лабораторияһында геолог һәм петрограф булып эшләй. 1937 йылдан 1941 йылға тиклем «Башнефть» берекмәһенең Үҙәк ғилми-тикшеренеү лабораторияһы геология кабинеты начальнигы булып эшләй. Һуғыш башланыу менән Ҡадир Тимерғазин Ҡыҙыл Армия сафында була, Монголияла Байкал аръяғы фронтында артиллерия взводы командиры булып хеҙмәт итә, һуңынан Ашхабадтағы ике йыллыҡ Хәрби-юридик академияға күсерелә. 1943 йылдан 1-се Белорус фронтының 397-се уҡсылар дивизияһы составында фашист илбаҫарҙары менән һуғыша. Белоруссияны, Балтик буйын, Польшаны, Көнсығыш Германияны азат итеүҙә, Берлинды штурмлауҙа, Эльбалағы осрашыуҙа ҡатнаша. Күп хәрби наградалар менән бүләкләнә.

Һуғыш тамамланғандан һуң бер ни тиклем ваҡыт Германияла хәрби кадрҙар хеҙмәтендә була. Демобилизациянан һуң Ҡадир Рәхим улы ятаҡан эшенә тотона. 1946 йылда «Башнефть» берекмәһенең (ЦНИЛ) Үҙәк ғилми-тикшереү лабораторияһы директоры була, уның базаһында Өфө нефть эшкәртеү заводының Үҙәк лабораторияһы ҡатнашлығында Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институты ойошторола.

Һуңыраҡ шунда уҡ литология һәм геохимия лабораторияһы мөдире булып эшләй. 1950 йылда институттың геология бүлеген етәкләй. Директор урынбаҫары, 1953 йылдан Тау-геология институтының нефть һәм газ геологияһы лабораторияһы мөдире булып эшләй. СССР фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалына һәм уның составындағы Тау-геология институтына нигеҙ һалыусыларҙың береһе була.

Һуғыш юлы үткән Ҡадир Рәхим улы, фәнгә ҡайтҡас, үҙен иҫ киткес ойоштороусы итеп күрһәтә. Өфө НЕФТЬ сәнәғәте нефть ғилми-тикшеренеү институтының (УФНИИ) «Башнефть» (ЦНИЛ) базаһындағы ойошмаһына күп көс һәм ваҡыт бирә, хәҙер ул «БашНИПИнефть» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт.

**СИЛӘБЕ УҘАМАНЫНЫҢ БАШҠОРТ НЕФТЕНДӘГЕ ӨЛӨШӨ**

1949 йылда Тимерғазин Ҡазан университетында «Баулы-Туймазы нефтле районының девон ултырмалары» темаһына кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлай.

Уның тикшеренеүҙәре һөҙөмтәләре Башҡортостанды илдә нефть сығарыу буйынса беренсе урынға сығарҙы. Тимерғазин эшләгән девон ултырмаларының төплө литологик-стратиграфик схемаһы, уларҙы фәнни яҡтан шулай классификациялайҙар, бөтә Урал-Волга буйы ултырмаларының унификацияланған стратиграфик схемаһының нигеҙенә һалына. Тикшеренеүҙәр мәғлүмәттәре буйынса, Тимерғазин 1958 йылда «Көнбайыш Башҡортостандың додевон ултырмалары һәм уларҙың нефть-газлылығы перспективалары» темаһына докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. Ул 1960 йылда башҡорт халҡы араһында геология-минералогия фәндәре буйынса беренсе доктор һәм профессор була. Уның монографияһы әлегә тиклем актуаллеген юғалтмаған. Додевондағы иң бай нефть һәм газ ятҡылыҡтары Рифей — венд ултырмаларында хәҙерге Ваҡытта Көнсығыш Себерҙә асылған. Хәҙерге Башҡортостан геолог-нефтселәре был ултырмаларҙы төплө тикшереүен дауам итә һәм уларға ышанысын юғалтмай.

Шәхси планындағы тикшеренеү эштәре менән мауығыуы һәм ҙур эшһөйәрлеге уның тирәләй юғары әүҙемлек атмосфераһы тыуҙыра.

К. Р. Тимерғазин башҡорт геологияһының абруйлы вәкиле була. Ҡулына геологик сүкеш тотоп һәм ябай һалдат итектәре кейеп, Урал тауҙарының иң бейек үткәүелдәрен үтеп, ул геологик һәм тектоник яҡтан ҡатмарлы төҙөлгән көньяҡ Урал территорияһы структураларын арымай-талмай тикшерә. Ҡадир Тимерғазин 70-тән ашыу фәнни хеҙмәт яҙған. Уның «Башҡорт нефте тарихы» тигән иҫ киткес китабы бар, унда ул аңлы рәүештә йәки наҙанлыҡ буйынса башҡорттар тураһында примитив малсылар булараҡ индерелгән ҡарашты документаль рәүештә кире ҡаға. Ул махсус рәүештә Ленинградҡа бара һәм Петр I кунсткамераһында старшина Надир Уразмәтовтың 1764 йылдың 16 июлендә Бергколлегияға Шугурала нефть эшкәртеү заводы төҙөү тураһында үтенесен таба.

Ҡадир Тимерғазин тәүтормош тәбиғәтендә геологияны ярата, йәғни ул ер ҡабығының киҫелештәре, уның файҙалы ҡаҙылмалар ятҡылыҡтары барлыҡҡа килеүе менән оҙатылған структур зоналары тураһындағы фәнде ярата, улар нигеҙендә ул йыйырсыҡлы системаның барлыҡҡа килеү тарихы буйынса дөйөмләштереүҙәр яһай. Геологик күренештәрҙе тап ошондай интерпретациялауҙа уның геологиялағы уңышы ята. Күренекле ғалимдың фәнгә тоғро хеҙмәт итеүенең миҫалы беҙҙең йәш геологтар быуынына кәрәк.

Ҡадир Рәхим улы Тимерғәзиндың ижади мираҫы ҙур. Уның баҫылған монографиялары, ғилми мәҡәләләре һәм күп һанлы карталары XXI быуат геологтарының өҫтәл материалы булып оҙаҡ ваҡыт торасаҡ. Уның исеме Башҡортостан Республикаһының күренекле тектоника тикшеренеүселәре исемлегенә инә.

**ЛАЙЫҠЛЫ БАҺА**

1959-1963 йылдарҙа Ҡадир Тимерғазин Башҡорт АССР-ы Юғары Советы депутаты һәм рәйесе итеп һайлана. 1963 йылда РСФСР-ҙың Юғары советы депутаты була. Дәүләт алдындағы ҙур хеҙмәттәре өсөн 1957 йылда Ҡадир Тимерғазинға «РСФСР-ҙың Атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре» тигән маҡтаулы исем бирелә. Ул 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены, Ҡыҙыл Йондоҙ, «Почет Билдәһе» (ике тапҡыр), күп миҙалдар менән бүләкләнә.

Күп эштәрен тормошҡа ашырырғахыялланғанҠадирРәхим улы 1963 йылдың 4 апрелендә фронтта алған ауырыуҙан вафат була һәм Өфөләге Башҡорт зыяратында ерләнә. Ҡәберендә яһалма таштан саркофаг ҡуйылған, уның эсендә сәскәлек. Обелискта ҡара граниттҡа ошондай һүҙҙәр уйып яҙылған: геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин. 1913-1963.

Ғалим Ҡадир Рәхим Улы Тимерғазин тураһында иҫтәлек оҙаҡ ваҡыт уның менән эшләгән, уның менән аралашыу бәхетенә эйә булған һәр кемдең йөрәгендә буласаҡ. Беҙ уны үткән быуаттың лайыҡлы кешеһе, ярҙамсыл һәм изге күңелле, геологияға сикһеҙ тоғро кеше булараҡ иҫкә аласаҡбыҙ.

ЯҢЫЛЫҠТАР

## Арғаяштар Мейәстән бүләктәр алып килде




**7 октябрҙә Мейәс ҡалаһының халыҡ ижады Йортонда «Иман нуры» тип аталған Мөнәжәт башҡарыусыларҙың II асыҡ ҡала конкурсы үтте.**

Конкурсты ойоштороусы булып Мейәс ҡалаһы халыҡ ижады Йорто эргәһендәге «Аҡ инәйҙәр» клубы торҙо. Етәксеһе – Шафиҡова Бүләкәй. Конкурс яңғыҙ һәм коллектив башҡарыусылар араһында үткәрелде.

Башҡарыусыларҙың сығыштарын компетентлы жюри баһаланы. Уның составына Арғаяш районы имам-мөхтәсибе Күсәғолов Илмир хәҙрәт, тау заводы зонаһы имам-мөхтәсибе, Мейәс ҡалаһы имам-хатибы, мосолман общинаһы башлығы Әхмәт Хәҙрәт Хәсәнянов, Мейәс ҡалаһының халыҡ ижады Йорто директоры Рәфилә Касьянова, Силәбе өлкәһендәге башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге методисы Вилиә Батршиналар инде.

Конкурста Силәбе коллективтары – өлкә башҡорттары Ҡоролтайы «Ҡурай»ҙың «Өмөт» фольклор төркөмө, Арғаяш районы Ятраҡол һәм Ҡолой ауыл биләмәләре, Мейәс ҡалаһы халыҡ ижады Йорто коллективтары ҡатнашты. Сараның Гран-прийына Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Ятраҡол коллективы лайыҡ булды. Яңғыҙ башҡарыусылар араһында Арғаяш районының Ҡолой ауылынан Риф Сөнәғәтуллин гран-при яуланы. Еңеүселәрҙе грамоталар менән бүләкләнеләр, конкурста ҡатнашыусыларҙың барыһына ла дипломдар һәм бүләктәр тапшырылды.

## Экранда – «Төньяҡ амурҙары»

**Район мәҙәниәт йорто, шулай уҡ Силәбенең «Еңеү» һәм «Байраҡ» кинотеатры экрандарында «Төньяҡ амурҙары» тип аталған яңы анимация йәнһүрәте күрһәтеләсәк.**

Мультфильм ике һуғыш — рус-швед һәм 1812 йылғы Ватан һуғыштарын үтергә тейеш биш башҡорт яугиры тураһында патриотик тарихтан ғибәрәт. Французлар уларҙы мөхәббәт аллаһы Амур хөрмәтенә Төньяҡ амурҙар тип атай, сөнки атлылар уҡ һәм уҡ менән ҡоралланған була. Улар көтмәгәндә дошманға һөжүм итә һәм шулай уҡ ҡапыл тылға инеп ғәйеп була. Был батырҙарҙы бер нисек тә ҡулға төшөрөп булмай.

Билеттарҙы кинотеатр кассаларында һатып алырға мөмкин.

## Республика Көнө

**Йыл һайын 11 октябрҙә Башҡортостан Республикаһы көнөн — Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнөн билдәләйбеҙ.**

Был көндә 1990 йылда республиканың юғары Советы дәүләт суверенитеты тураһында Декларация иғлан итә. Был байрам күп милләтле халыҡтың берҙәмлеген, һәр беребеҙҙең тыуған яғыбыҙға ҡарата мөхәббәтен, тарихи уртаҡлығыбыҙҙы һәм республиканың ҙур потенциалын аңлауҙы символлаштыра.

Ҡәҙерле дуҫтар! Барығыҙҙы ла Башҡортостан Республикаһы көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ! Ныҡлы һаулыҡ, энергия, оптимизм, республикабыҙҙа тыныслыҡ һәм уның яңынан-яңы ҡаҙаныштар яулауын, һәр йортҡа татыулыҡ һәм именлек, Ватаныбыҙҙың сәскә атыуы хаҡына изге традицияларҙы нығытыуҙа артабан да уңыштар теләп ҡалабыҙ!

Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәҡәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ:
Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.